# Башҡортостан Республикаһының Ейәнсура районы муниципаль районының муниципаль автоном мәҙәниәт учреждениеһының «Ейәнсура балалар китапханаһы»

республикабыҙҙа балалар һәм үҫмерҙәр өсөн сыҡҡан берҙән-бер гәзит. Шуныһы менән ҡиммәтле лә ул. Гәзит төҫлө, бай йөкмәткеле, күҙгә ятыш матур, ипле дизайнлы, ҡыҙыҡлы, зауыҡлы булып сыға.






Йәншишмә нең һәр бер һаны үҙенә күрә, балаларҙың шатлыҡтарын уртаҡлашыусы, асыштарға алып килеүсе, ҡыйын саҡтарында кәңәш-төңәш, бөтмәç һорауҙарына яуап биреүсе, бәләкәй генә бер энциклопедия ул.

Шуға күрә «Йәншишмә» – етди гәзит, тип лайыҡлы рәүештә әйтеп була.

Йәншишмә мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың, мәктәп уҡыусыларының, тәрбиәселәрҙең, уҡытыусыларҙың, ата-әсәләрҙең, олатай-өләсәйҙең, шулай уҡ хөрмәтле яҙыусыларҙың да ҡыуанып көтөп алған уҡымлы, абруйлы гәзите. Был гәзитте уҡыған һәр кем бала саҡ иленә сәйәхәт итә ала.



**1930 йылдың 12 февралендә «Йәш төҙөүсе»нең беренсе һаны сыға. Урыҫ алфавиты индерелмәгәнлектән, латин хәрефтәре менән баҫыла. Тәүге мәлдә тираж ҙур булмай. «Йәш төҙөүсе» пионерҙарҙың, ғөмүмән, республика балаларының күңеленә хуш килә. Тиражы 1931 йылда ун меңдән артып китә. Гәзит эргәһенә оло һәм кесе йәштәге ижади көстәр туплана. 1991 йылда, Советтар Союзы тарҡалғас, гәзит заман талаптарынан ҡалышмай һәм исемен «Йәншишмә»гә үҙгәртә.**



Йәншишмә гәзитенең баш мөхәррире – Мирсәйет Юнысов. Баҫма аҙнаһына ике тапҡыр – шаршамбы һәм йома көндәрендә сыға. 4 биттән тора. Йылдың һуңғы һәм төрлө байрамдарға арналған номерҙары 8 битле булып баҫтырыла. Күләме – бер баҫма табаҡ. Тиражы – 1471 дана. Унын девизы – «Киләсәк һинән башлана».

**Гәзиттә иҫ киткес мауыҡтырғыс әкиәттәр ҙә, зиһенде нурландырырлыҡ мәҡәл-йомаҡтар ҙа, күңелдәрҙе арбап алырлыҡ шиғырҙар ҙа, мәҙәк-көләмәстәр ҙә, өмөт саткылары ҡалдырған теләк-юрауҙар ҙа бар. Һәр бала милли йөҙлө ошо баҫма ярҙамында донъяны танып-белеү бәхетенә ирешә. Ҡыҫҡаһы, ул – бала саҡтың**

**иң шәп гәзите.**

http://goldina-myclas.ucoz.ru/

Гәзиттә төрлө-төрлө рубрикалар бар:

«Мәғариф яңылыҡтары». Мәктәп тормошона ҡағылышлы ҡыҫҡа материалдар. Редакция хеҙмәткәрҙәре менән берлектә бында уҡыусылар, уҡытыусылар, министрҙар үҙҙәре лә сығыш яһай.

«Президент стипендиаты». Республикабыҙ Президенты стипендияһына лайыҡ булыусы ҡыҙ һәм малайҙар хаҡында һөйләнелә.

«Тәжрибә» рубрикаһы аҫтында уҡытыу методикалары хөкөмгә ҡуйыла, баһалана. Был материалдар уҡыусыларға ғына түгел, уҡытыусыларға ла бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булып килеп сыға.






**Ҡайһы бер сетерекле һорауҙарҙы бер номерҙа ғына ҡарап, йомғаҡ яһауы мөмкин түгел. Был осраҡта «Һөйләшеүгә саҡырабыҙ» рубрикаһы ҡотҡара. Баҫылып сыҡҡан материал, әҙәби әҫәргә ҡарата гәзит уҡыусыларынан фекер алышыу көтә. Һуңынан, барыһы ҡаралып, баһа бирелә.**





**Теге йәки был юғары уҡыу йорто, ундағы факультеттар, һөнәрҙәр тураһында мәғлүмәт бирегеҙ, тип һорап йыш ҡына уҡыусылар үҙҙәре мөрәжәғәт итә. Бына шул саҡта «Уҡырға ҡайҙа барырға?» рубрикаһы уларға ярҙамға килә. Шуға күрә бындағы материалдар абитуриенттарға бик тә кәрәкле һәм файҙалы. Гәзит хеҙмәткәрҙәре бының өсөн ҡабул итеү комиссияһы ағзалары менән гелән бәйләнештә тора.**




**«Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?» рубрикаһы нindəйҙер бер мәсьәләгә ҡарата уҡыусыларҙың ҡарашын белдерергә саҡырып, уҡыусыға әйтер һүҙен еткерергә ярҙам итә һәм әүҙем ижади донъяға ылыҡтыра.**

**Айҙың аҙағында кескәйҙәр өсөн «Тирмәкәй» рубрикаһы сыға.**

**Ул һандың өсөнсө һәм дүртенсе биттәрендә тәкдим ителә.**

**«Тирмәкәй»ҙә башланғыс синыф уҡыусылары сығыш яһай.**

**Материалдар ҡыҫҡа ғына, иллюстрациялар, һүрәттәр күберәк.**

**Төрлө-төрлө уйындар бирелә, викторина-конкурстар ойоштороло.**






Йәншишмә заман менән бергә атлап бара. Хәҙер кешенең төп ярҙамсыһы – компьютер икәнен белә ул. Шуға күрә 2010 йылда гәзиттә **«Замана дәрестәре»** тип аталған өр-яңы рубрика асылды. Унда Йәннәт менән Инет тигән геройҙар индерелде.






**Гәзит үҙ биттәрендә әхлаҡ, иман, тәрбиәлелек темаларын да яҡтырта. «Иман барҙа – әхлаҡ бар» рубрикаһы үҫмерҙәрҙе әхлаҡи ҡиммәттәр менән таныштырып бара.**

**«Был донъяла ниҙәр бар?»** рубрикаһында донъя яңылыҡтары, иң әһәмиәтле ваҡиғалар хаҡында хәбәрҙәр бирелә.

**«Башҡортостан яңылыҡтары»** республикабыҙҙа булып үткән саралар, бәйге-ярыштар, реформа-указдар һ. б. яңылыҡтар менән таныштыра.

**«Гәзитебеҙ – дуҫыбыҙ»** рубрикаһында «Йәншишмә» тураһында уҡыусылары фекер йөрөтә.

Уҡыусыларҙың төрлө темаларға – ауыл тормошо, теге йәки был хәл-ваҡиға, саралар, үҙ яңылыҡтары һәм фекерҙәре, ҡыуаныс-көйөнөстәре – ебәргән хаттары **«Беҙгә килгән хаттарҙан»** рубрикаһында дөйөмләштерелеп баҫыла.

**«Беләһеңме?»** рубрикаһы ҡыҫҡа итеп яҙылған материалдар менән донъялағы, кешелек тарихында булған төрлө хикмәтле, әкәмәтле факттар, хәл-ваҡиғалар менән таныштырып бара.





Киләсәк һинән башлана
Йәншишмә
Гәзит 1930 йылдың 12 февраленән нәшер ителә. Шаршамбы, йома көндәрендә сыға.
№7 (5472)
28 ғинуар, йома, 2005 йыл.
РЕСПУБЛИКА БАЛАЛАР ҺӘМ ҮҪМЕРҘӘР ГӘЗИТЕ
ОЙОШТОРОУСЫҺЫ – БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ХӨКҮМӘТЕ ЭРГӘҺЕНДӘГЕ МАТБУҒАТ, НӘШРИӘТ ҺӘМ ПОЛИГРАФИЯ ЭШТӘРЕ БУЙЫНСА ИДАРАЛЫҠ.

**«Төнгө урам» рубрикаһы балалар, үҫмерҙәрҙе насар ғәҙәттәрҙән, насар аралашыуҙарҙан ары торорға өгөтләй. Ғибрәтле хәлдәрҙән ғибәрәт алып барырға өйрәтә. Шул уҡ ваҡытта егет һәм ҡыҙҙарҙың конкрет проблемаларына тулы яуап, авторитетлы рекомендациялар бирелгән. Уҡыусылар үҙҙәре лә был рубрикала бик әүҙем ҡатнаша.**

**«Минең бәләкәй бизнесым»** рубрикаһы бәләкәстәрҙә эшҡыуарлыҡ сифаттары тәрбиәләй. Үҙ көсөң менән хәләл ризыҡ, аҡса табырға өйрәтә. Шундай үҫмерҙәр, йәштәр тураһында редакция хеҙмәткәрҙәре генә түгел, уҡыусылар үҙҙәре лә һөйләйҙәр. Тимәк, тырыш, уңған, егәрле быуын үҫеп килә, тигән һүҙ был. Шуның менән бигерәк әһәмиәтле был рубрика.

**«Тәбиғәт мөйөшө»** рубрикаһы үҫеп килгән быуында тәбиғәткә ҡарата иғтибарлы ҡараш тәрбиәләй. Уртаҡ йортобоҙҙо һаҡлау, ҡурсалау кәрәк, тигән фекер һыҙыҡ өҫтөнә алына. Материалдар миҙгелдәргә айырып бирелә. Шулай уҡ бында ай башында буласаҡ иҫтәлекле, билдәле даталар теҙмәһе бирелә. Уҡыусылар ул-был хаҡында яҙып ҡына ҡалмай, матур-матур һүрәттәр ҙә баҫтыра.







**«Ғаилә усағы»** үҙенең атамаһын тулыһынса аҡлап килә. Уҡыусылар ата-әсәһе, туғандары, яҡын кешеләре хаҡында маҡтау һүҙе әйтергә ашҡынып тора. Ә был рубрика уларға киң майҙан аса.

**«Былар ҡыҙыҡлы»** рубрикаһы балалар өсөн генә түгел, өлкәндәр өсөн дә бик ҡыҙыҡлы, сөнки белем кимәле күтәрелгән һайын ҡыҙыҡһыныуҙар арта бара.



**Үҫмерҙәрҙең иң яратҡан һәм көтөп алған рубрикаһы, моғайын, «Йәш егеттәр, йәш ҡыҙҙар»ҙыр. Бында үҫмерҙәр күңелдәрендә яңы яралып килгән һөйөү хаҡында үҙ-ара серләшәләр, бер-береһенә кәңәш бирәләр, ҡайғы-шатлыҡтары менән уртаҡлашалар, мөхәббәткә йыр йырлайҙар.**





«Йәншишмә» гәзитендә төрлө рубрикаларҙың донья күреүе уҡыусыларҙы рухи яҡтан үҫтерергә, төрлө өлкәлә белемен арттырырға ярҙам итә. Тарих буйынса ла файҙалы мәғлүмәттәр тупларға мөмкин. Гәзиттә рубрикаларҙың бихисап һәм төрлө булыуы уны йөкмәткеле, уҡымлы һәм төрлө йәштәгеләр өсөн ылыҡтырғыс итә.





# Ейәнсура район балалар китапханаһы ла «Йәншишмә» гәзите менән дуҫ. Үткәрелгән саралар, яңылыҡтар гәзит биттәрендә йыш ҡына донъя күрә.



«Экранда – фильм, беҙҙә – китаптар»

Кино йылы сиктәрендә Ейәнсура район балалар китапханаһында «Экранда – фильм, беҙҙә – китаптар» тигән күргәҙмә ойошторолдо. Билдәле башҡорт, урыҫ һәм сит ил яҙыусылары – Мостай Кәримдең «Беҙҙең өйҙең йәме», «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ», Степан Злобиндың «Салауат Юлаев», Иван Тургеневтың «Муму», Николай Голдең «Вий», Лев Толстойҙың «Һуғыш һәм солох», Гавриил Троепольскийҙың «Аҡ Бим, ҡараҡолаҡ», Маргарет Митчелдың «Ел осорған» кеүек китаптары, DVD дискылар урын алды.

Күргәҙмәне ҡарарға Иҫәнғолдағы 2-се мәктәп уҡыусылары ла килде. Улар кино тарихы менән танышты, «Башҡорт киноһы көндәре» аҙналығында ҡатнашты, «Тамыр» балалар-үҫмерҙәр телеканалының «Ҡоралай», «Ҡарйондоҙ» фильмдарын, йәнһүрәттәрен ҡараны.

*Гөлсиә ИЛТЕНБАЕВА.*
*Ейәнсура районы, Иҫәнғол ауылы.*







Тылсымлы донъяның яңы битен астыҡ

*Район балалар китапханаһында балалар һәм үҫмерҙәр китабы аҙналығы «Китап һәм кино менән донъя иңләйбеҙ» исемле девиз менән старт алды. Һәр бер көн ошо ике тылсымлы донъяның яңы битен асты. «Китапһыҙ беҙ нисек йәшәр инек?» тип исемләнгәне лә уҡыусыларҙың иғтибарын йәлеп итте.*

Китапханасы Лариса Абдрахманова иң әүҙем уҡыусылар Катя һәм Ксения Черкашиналар менән.

«Мөғжизәле китап утрауында» тигән театрлаштырылған тамашала әкиәт геройҙары – Белмәҫйән, Пеппи ҡатнашты. Улар уҡыусыларға Кино йылына арналған викторина һорауҙары, йомаҡтар, «Фильмды таны», «Кино геройҙары» кеүек конкурстар әҙерләгәйне. Балалар яҙыусыларының китаптары буйынса «Тамыр» студияһында төшөрөлгән фильмдар ҙа күрһәтелде.

Аҙнаның бер көнөндә Чернобыль фажиғәһенең 30 йыллығына арнап Хәтер көнө үткәрелде. Уҡыусылар тетрәндергес ваҡиғаның эҙемтәләре тураһында тынланы, видеоҙма ҡараны.

Быуа аҙналыҡтың һуңғы көнө – иң әүҙем ҡатнашыусыларҙы, китап һөйөүселәрҙе бүләкләү мәле етте. «Иң ҡалын формуляр» номинацияһына Айзилә Рәхмәтуллина лайыҡ булды, «Иң бәхетле уҡыусы» – Ксения һәм Карина Анфиловалар, «Китапҡа һөйөү» исемлеһен Алина Искәндәрова менән Айҙар Ҡолонбаев алды. Еңеүселәргә Маҡтау ҡағыҙы һәм иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды.

*Гөлсиә ИЛТЕНБАЕВА.*
*Ейәнсура районы, Иҫәнғол ауылы.*

**«Йәншишмә»нең хәбәрселәре**

**гәзитте тағы ла уҡымлыраҡ һәм зауыҡлыраҡ итеү өсөн һәр саҡ юлда. Улар китапханаларҙа, мәктәптәрҙә көтөп алынған ҡунаҡтар, әңгәмәләштәр һәм дуҫтар. Ейәнсура балалар китапханаһы коллективы ла, гәзит үҙенең уҡыусыларын һәм дуҫтарын арттырһын өсөн матур эштәр алып бара.**













Яҙыл, уҡы, булма ғәмһеҙ,

"Йәншишмә"һеҙ - донъя йәмһеҙ!




